**ЗАДАНИЯ**
**На отборочный этап Акмуллинской олимпиады по башкирскому языку и литературе для учащихся 8-9 классов 2022-2023 уч. год.**

**Теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында ҡайһы аңлатма дөрөҫ:**

теҙмә ҡушма һөйләм эсенә ингән һөйләмдәр бер-береһенә буйһона
теҙмә ҡушма һөйләм ул эйәртеүле ҡушма һөйләмдең бер төрө
теҙмә ҡушма һөйләм эсенә ингән һөйләмдәр бер-береһенә буйһонмай
Теҙмә ҡушма һөйләмдәр һәр ваҡыт бер үҙ аллы һөйләмдән тора

***Тәртип бар ерҙә (...) белем бар.*** **Был һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?**

өтөр
һыҙыҡ
бер нимә лә ҡуйылмай
ике нөктә

**Эйәлек килеш һәм эйәлек зат менән бирелгән һүҙбәйләнеште билдәләгеҙ:**

яҡты сырай
студент көндәлеге
мажаралы йәй
Ватанды һөйөү

**Ҡылымдың ҡайтым йүнәлеше менән бирелгән һөйләмде табығыҙ:**

Биҙәнеү - төҙәнеү өсөн дә оҫталыҡ кәрәк
Был хат бик күптән яҙылған булған
Һеңлем миңә бөтә йорт эшендә лә булыша
Мәктәптә көнөнә ике тапҡыр иҙән йыуыла

**Тултырыусы һөйләмде табығыҙ:**

мин шуға шатландым: бөгөн ағайым килә
кемдең дуҫтары күп, шул бәхетле
Әсәйем килдеме, кәйефем күтәрелә
Беҙ менәсәк фәндәр тауы бик бейек һәм бик текә

**«Өҫтөмә таш яуып торһа ла, һине килеп алырмын» (Ә. Хәкимо - эйәрсән һөйләм төрөн билдәләгеҙ**:

Шарт һөйләм
Кире һөйләм
Маҡсат һөйләм

**Нимә ул катмарлы синтаксик конструкция:**

Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр, һүҙбәйләнештәр ингән конструкцияны атайҙар
Ябай һөйләмдәр, ҡушма һөйләмдәр, теһемдәр ингән конструкцияны атайҙар

Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр, ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр, теҙемдәр ингән конструкцияны атайҙар

Дөрөҫ яуап юҡ

**Бер составлы һөйләмдәр араһынан эйәһеҙ һөйләмде билдәләгеҙ:**

Йөрәгенән урғылып сыҡҡан шатлыҡтан егеттең һикергеһе, бейегеһе, йырлағыһы килә. (Ф. Иҫәнғоло;

Шулай бер көн беҙгә йөк ташырға ҡуштылар. (Р. Солтангәрәе;

Көн буйы яуған ямғыр кискә ҡарай ҡапыл туҡтаны. (М. Кәрим);

Күңелендә уларға айырым бер хөрмәт, ныҡлы ышаныс һаҡлай. (Һ.Дәүләтшин.

**Алмаштарҙың төркөмсәләрен билдәләгеҙ: Был (1) ваҡиғанан һуң беҙҙең (2) тормош кәртәләнде: миңә (3) гәзит һатырға рөхсәт итмәнеләр.**

күрһәтеү, эйәлек, зат

билдәһеҙлек, һорау, юҡлыҡ

күрһәтеү, зат, зат

һорау, эйәлек, зат

**Исем ҡылым менән бирелгән һөйләмде билдәләгеҙ:**

Һалды ҡаршыларға кешеләр билдәләнә

Олатайым һөйләгән ваҡиғалар мәктәп альбомына теркәлгән

Өй эсендә шау-шыу, илау, шатланыу башланды

шатлығымдан һикерҙем

**Түбәндәге конструкцияла нисә баш һәм нисә эйәрсән һөйләм бар?**

**«Яҙ етеү менән, аҡлан өҫтөн йәшел үлән ҡаплай, тәүге сәскәләр күҙҙәрен аса»**

Ике эйәрсән, бер баш һөйләм

Ике баш, бер эйәрсән һөйләм

Бер баш, бер эйәрсән һөйләм

**Ҡаршы куйыу теркәүестәре булған юлды ғына билдәләгеҙ.**

Етмәһә, йәнә, тағы, һәм, шул уҡ ваҡытта

Хатта, тимәк, гүйә, әйтерһең дә, ғөмүмән

Әммә, ә, тик, ләкин, бәлки, шулай ҙа

Йә, йәки, әле, берсә, ни, әллә.

**«*Тирмә короорға булғайнылар (?) көслө ел сыкты*» һөйләмендә ниндәй тыныш билдәһе төшөп ҡалған?**

нөктәле өтөр

ике төр

ике нөктә

һыҙыҡ.

**Түбәндәге шиғыр юлдарының авторын һәм шиғырҙың исемен билдәләгеҙ:**

***Сөн ярынан алыҫтарға бактым,***
***Офоҡтарҙа даръя-баҫыу аҡты,***
***Бар тарафта донъя ниндәй яҡты,***
***Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты:***
***Башҡортостан бында башлана!***

Р.Ғарипов («Урал йөрәге»)
М. Кәрим («Башҡортостан бында башлана»)
Р. Бикбаев («Башҡортостан бында башлана»)
Н. Нәжми («Аҡ шишмә»)

**Аныҡлаусы һөйләм ниндәй һорауҙарға яуап бирә?**

Нисек? Нимә? Кем?
Кемдең? Нимәнең? Ниндәй?
Нисек? Ни рәүешле?
Ниндәй дәрәжәлә? Күпме? Ни тиклем?

**Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ: «Февраль айының ҡаты бурандары».**

билдәле эйәле
дөйөм эйәле
эйәһеҙ
атама

**З. Биишеваның «Һөнәрсе менән өйрәнсек» әҫәрендә Хасбулат олатайға хикәйәтте кем һөйләй?**

Айбулат исемле күршеһе һөйләй
Ташбулат исемле ҡорҙашы
Аҡбулат исемле кавказ кешеһе
Байбулат исемле дуҫы.

**Аҡмулла ҡушаматын шағирға ҡайһы милләт вәкилдәре биргән?**

татарҙар
башҡорттар
ҡаҙаҡтар
Дөрөҫ яуап юҡ.

**Ҡайһы әҫәрҙә 1812 – 1813 йылдар ваҡиғаһы һүрәтләнә?**

«Ҡаһым түрә» драмаһы
«Кинйә» романы
«Төньяҡ амурҙары» романы
«Ер» поэмаһы.

**Түбәндәге өҙөк ҡайһы әҫәрҙән алынған?**

Башҡортостан тәне ҡара янған
Меңәрләгән ҡамсы эҙенән,
Беҙҙең ҡанды әгәр бергә йыйһаң,
Ҡыҙылайыр ине диңгеҙҙәр.
Батша итегенең ауырлығын
Икеләтә индә татыныҡ:
Урыҫ байы теҙгә йөгөндөрһә,
Башҡорт байы ергә яҭҡырҙы...

«Бөркөттәр төйәге» шиғыры (Хәсән Назар)
**«Ер» поэмаһы (Баязит Бикбай)**
«Ҡан баҙары» шиғыры (Дауыт Юлтый)
Дөрөҫ яуап юҡ

***Һөнәре юҡтың ҡәҙере юҡ*** **һөйләмдә баш һөйләмдең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән**

Модаль һүҙ
Рәүеш
Ымлыҡ
Алмаш

**Эйәртеүсе киҫәге алмаш булған һүҙбәйләнештәрҙе билдәләгеҙ:**

Йәйге имтихан, етенсе йыл, яҡшы баһа
Студенттарҙан һин, уҡыусының үҙе
Алдан өсөнсө, һеҙгә икешәр
Мәктәптә эшләү, дуҫты осратыу, эшкә барыу.

**3. Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» әҫәрендә :**

Юлдаш – Ишембайҙан, Ҡыҙрас – Туймазынан
Юлдаш – Өфөнән, Ҡыҙрас – Октябрскиҙан
Юлдаш – Ишембайҙан, Ҡыҙрас – Октябрскиҙан
Дөрөҫ яуап юҡ

**«Уҡытыусыһы ниндәй – уҡыусылары ла шундай» - эйәрсән һөйләм төрөн билдәләгеҙ:**

Урын һөйләм
Сәбәп һөйләм
Ваҡыт һөйләм
Хәбәр һөйләм

***«Һыу ярҙың ситенә үк күтәрелгән»*** **һөйләмендә киҫәксәне табып, төрөн билдәләгеҙ:**

Һорау
Икеләнеү

Сикләү
Көсәйтеү

**Яҙылышы дөрөҫ булмаған юлды күрһәтегеҙ:**

Апрельда
Һүҙьяһалыш
Төньяҡ
Бөтәһе лә дөрөҫ

**«Абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән» мәҡәле рус теленә түбәндәгесә тәржемә ителә?**

От одного слова – да на век ссора
Лишнее говорить – себе вредить
И на доброго коня спотычка живет

**«Әйткән һүҙ – ........ уҡ»  мәҡәлендә төшөп ҡалған һүҙҙе тап:**

ырғытҡан
атҡан
бәргән
елләгән

**«*Юҡ, аңламайым мин Таңһылыуҙы, зиһенем етмәй, үҙенә кемде иш иткән! Ниндәй кеше ул, ҡайҙа нисек тәрбиәләнгән? Ҡайһылай ул Таңһылыуҙан Таняға, Татьяна Владимировнаға әйләнгән? Кем тыуҙырған уны, кем үҫтергән, тәрбиәләгән? Ҡайҙа тыуған ул? Ниндәй күктәр аҫтында йәшәгән?*». Ниндәй әҫәр тураһында һүҙ бара. Уның авторы кем?**

«Мәтрүшкә еҫе» әҫәре, авторы Талха Ғиниәтуллин
«Таня-Таңһылыу» әҫәре, авторы Ринат Камал
«Таня-Таңһылыу» әҫәре, авторы Талха Ғиниәтуллин

**«*Кинйә юлға әҙерләнә башланы. Һуңғы ваҡыттарҙа күнегелгәнсә камзул эсенән тимер күлдәген кейҙе, ҡағыҙ, ҡара һауыты, ҡауырһындар алды*». Бирелгән текст ниндәй әҫәрҙән алынған һәм уның авторы кем?**

«Кинйә» романынан, авторы Яныбай Хамматов
«Кинйә» романынан, авторы Ғәли Ибраһимов
«Эйәрләнгән ат» романынан, авторы Булат Рафиҡов
Дөрөҫ яуап юҡ